*Рафаэль СӘЛИХОВ,*
*Салауат башҡорт дәүләт драма театрының әҙәби бүлек мөдире,*
*Башҡортостандың халыҡ артисы*

# КИЛӘСӘК ӨМӨТ УЯТА

Республикабыҙҙа абруйлы, иң өлкән коллективтарҙан һаналған Салауат башҡорт дәүләт драма театры үҙенең 70 йыллыҡ юбилейын билдәләргә йыйына. Ошо ғүмер осоронда театр ҡалала, Башҡортостан төбәктәрендә генә түгел, күрше Татарстан Республикаһында, башҡа бик күп өлкәләрҙә гастролдәрҙә булып, тамашасылар һөйөүен яуланы. Үҙенә генә хас матур традициялар туплаған коллектив төрлө йылдарҙа байтаҡ әҫәрҙәрҙе сәхнәгә ҡуйҙы. Ауырғазы колхоз-совхоз театры булараҡ ойошҡан һәм Башҡортостан хөкүмәтенең ҡарары буйынса 1956 йылда йәш индустриаль ҡала Салауатҡа күсеп, Салауат башҡорт драма театры рәүешендә үҙ эшмәкәрлеген дауам иткән был коллективта бер-нисә быуын артистар үҫеп сыҡты. Әле лә ул оло быуын артистары булдырған традицияларҙы дауам итеп, үҙенең ижади юлына тоғро ҡала. Беҙҙең коллективтан байтаҡ күренекле шәхестәр үҫеп сыҡты. Улар араһында В.Сәйфуллин, Р.Әйүпов, Р.Сәлихов, Г.Насирова, З.Әхмәровалар бар. Шуныһы шатлыҡлы, беҙҙең театр элек-электән үҙенең музыкаль спектаклдәре менән дан тота. Бөгөнгө көндә лә йәштәребеҙ араһында йыр-моңға оҫта егет-ҡыҙҙарыбыҙ бихисап.

Йәш, үҙ эшен яҡшы белгән, тынғыһыҙ ойоштороусы Наилә Байкова директор булып килгәс, театрҙың ижад дәрте тағы ла артты.

Әлеге ваҡытта оло юбилейға әҙерлек әүҙем бара. Башҡалабыҙ Өфөлә Башҡорт дәүләт академия драма театры бинаһында гастролдәр үтәсәк. Репертуарға һуңғы йылдарҙа ижад ителгән сәхнә әҫәрҙәре тәҡдим ителде. Улар араһында Мостай Кәримдең «Салауат» поэтик драмаһы ( режиссеры — Стәрлетамаҡ башҡорт драма театрының баш режиссеры Гөлдәр Ильясова), йәш драматург Хәмит Иргәлиндың «Юғалма өмөтөм» драмаһы, Татарстандың күренекле драматургы, яҡташыбыҙ Мирсәй Әмирҙең «Ғөлшаян» комедияһы, шулай уҡ «Бөгөн беҙҙә байрам» тигән театрлаштырылған тамаша тәҡдим ителәсәк.

Театрыбыҙға реконструкция уҙғарыу планлаштырылған. Бер нисә йылдан һуң уның йөҙө танымаҫлыҡ булып үҙгәрер тип өмөтләнәбеҙ — театр бинаһы башҡорт тирмәһен хәтерләтеп торасаҡ.

Бөтә театрҙар кеүек, беҙ ҙә әле режиссерҙарға ҡытлыҡ кисерәбеҙ. Оҙаҡламай үҙебеҙҙә эшләп киткән Ильдар Вәлиев Мәскәү театр академияһын тамамлап ҡайтыр, тип көтәбеҙ.

Бына шундай уй-хыялдар, киләсәккә яҡты өмөттәр менән янып йәшәйбеҙ, ижад итәбеҙ.

